*Рафаэль АҘНАҒОЛОВ,*
*педагогия фәндәре докторы*

# Һис китмәҫкә килгән кеүек ине

## Остаз күргән хат таныр


*Вафа Әхмәҙиев*

Ошо айҙың гүзәл бер көнөндә Вафа Әхмәҙиев үҙенең 70 йәшлек юбилейын үткәргән булыр ине. Ул тантанала кемдәр йәйрәп ултырырын аныҡ ҡына күҙ алдыма килтерә алмаһам да, үҙенең коллегаларын тоҫмаллауы ҡыйын түгел. Иң үрҙә, иң түрҙә Ғайса Хөсәйенов ултырыр ине, моғайын. Унан ҡала Суфиян Сафуанов, Ким Әхмәтйәнов, Әнүр Вахитов, Рауил Бикбаев һәм башҡалар түңәрәк өҫтәл артында урынлашыр һымаҡ. Бәлки, улай булмаҫҡа ла мөмкин бит әле. Заманаһы икенсе. Ул замананың сирек быуатын Вафа күрмәгән дә. Ваҡыт үлсәмдәре кешене лә, уның донъяға, тирә-йүндәгеләргә ҡарашын да үҙгәртә. Бигерәк тә ҡиблалар юҡҡа сыҡҡан дәүерҙә аҡыл-зиһендәрең йә үҫергә, йә түбәнәйергә мөмкин. Әҙәби мөхиттән бөйөктәр китте, уларҙың үксәһенә баҫа килгән арҡа терәр быуын да китте. Шуның менән бергә әҙәбиәт көмбәҙендә аҫыл йондоҙҙар һүнде. Ҡайһы бер әҙиптәребеҙ ”бөйөклөк” өйәнәге менән йонсой, ҡалғандары ла тормоштоң ваҡ-төйәк ”киҙеү”ҙәренән мәхрүм түгел.

Заманында Вафа Әхмәҙиев ”XX быуат башында башҡорт әҙәбиәте” проблемаһы буйынса ғилми тикшеренеүҙәр үткәргәйне. Ана шул ҙур хеҙмәттең һөҙөмтәләре алты томлыҡ әҙәбиәт тарихына инеп китте, байтаҡ мәҡәләләр донъя күрҙе һәм айырым бер монографик хеҙмәт баҫылып сыҡты. Быларҙың барыһында ла күренекле ғалим Вафа Әхмәҙиевтың күп яҡлы фәнни эшмәкәрлеге, тос хеҙмәте, әҙәби процесҡа аныҡ ҡарашы, үҙенсәлекле мөнәсәбәте ята.

Вафа Әхмәҙиев академик Ғайса Хөсәйенов мәктәбе вәкиле булды. Был мәктәптең концептуаль нигеҙҙәренә үҙ ижадтарының утын, ялҡынын өҫтәгән Ким Әхмәтйәнов, Әнүр Вахитов һәм башҡа ғалимдар Вафа Әхмәҙиевтың арҡа терәр ағалары ине.

”XX быуат башында башҡорт әҙәбиәте” тигән хеҙмәттең әһәмиәте һәм мәғәнәһе ниҙә һуң? Был һорауға яуап алыр өсөн хеҙмәтте ентекләп уҡып сығырға һәм өйрәнергә кәрәктер. Башҡорт әҙәбиәтенең үҫеш тенденцияларын автор тарихи осор менән бәйләп алып бара.

Әҙәбиәттең үҫешендә тарихи ваҡиғалар сағылыш табырға тейеш. XX быуат башы — Башҡортостандың тарихи ваҡиғалар ҡаҙанында ҡайнап торған сағы. Бына шуларҙың ҡайһы берҙәрен һанап ҡына сығайыҡ. Мәҫәлән:

— дини-реакцион ағымдың йоғонтоһо хәлһеҙләнә, ябай халыҡ массаларында дингә ышанмаусанлыҡ, кире ҡараш көсәйә;

— әҙәбиәттең милли ерлеге нығына бара, ул үҙаллы үҫеш юлына баҫа;

— Рәсәй империализмының эске сәйәсәте рус булмаған милләттәрҙе аяуһыҙ иҙеүҙе күҙ уңында тота;

— башҡорт һәм татар милли буржуазияһы аяҡҡа баҫа;

— башҡорт ерҙәрен талау, баҫып алыу киң ҡолас йәйә, был хәл үҙ сиратында башҡорттарҙың милли-азатлыҡ хәрәкәтен киҫкенләштерә;

— Башҡортостан сәйәси тотҡондар һөргөнөнә әйләнә;

— батша хөкүмәте халыҡтың милли үҙаллылығы өсөн көрәшен аяуһыҙ рәүештә быуа;

— милли төбәктәрҙе көсләп руслаштырыу сәйәсәте алып барыла.

1905 йылғы буржуаз-демократик революцияны башҡорт халҡы бына ошондай шарттарҙа ҡаршы ала.

Вафа Әхмәҙиев үҙенең ”XX быуат башында башҡорт әҙәбиәте” тигән фундаменталь хеҙмәтендә Башҡортостанда мәҙәниәт һәм әҙәби хәрәкәт үҫешенә лә ентекле күҙәтеү яһай. Әйтергә кәрәк, XX быуат башы башҡорт халҡының милли үҙаңы уяныу осоро ла булды. 1905—1907 йылдарҙағы революция үҙең йәшәгән донъяға күҙҙе асыңҡырап ҡарарға ла мөмкинлек бирҙе. ”Халыҡтың социаль һәм милли-колониаль иҙеүгә ҡаршы нәфрәте урғып сығып, азатлыҡҡа ынтылышы, быуаттар буйы хөкөм һөргән ҡараңғылыҡтан, наҙанлыҡтан арыныу өсөн ең һыҙғанып мәғариф эшенә тотоноуы, милли мәҙәниәтен үҫтереүгә йөҙ бороуы, йәғни рухи яҡтан уяныуы, был осор әҙәбиәтенең йылдам үҫеш алыуына этәреш яһаусы төп сәбәптәр булды”, — тип яҙа автор. Был осор әҙәбиәте революцион үҙгәртеп ҡороуҙың төп ҡоралына әйләнә.

Вафа Әхмәҙиевтың тикшеренеүҙәренә ҡарағанда, революция һәм халыҡ, бай һәм ярлы, ер һәм азатлыҡ, башҡорт ерҙәренең таланыуына ҡаршы көрәш, милли үҙаллылыҡҡа ынтылыу, йәмғиәт һәм шәхес, халыҡ һәм интеллигенция, милли мәҙәниәттең, телдең һәм әҙәбиәттең яҙмышы кеүек мәсьәләләр XX быуат башында ижад итеүсе башҡорт яҙыусыларын борсомай ҡалмағандыр.

XX быуат башы әҙәбиәте халыҡтың аң кимәлен, аҡыл көсөн үҫтереүгә йөҙ борҙо. Быуаттар буйы үҙ азатлығы өсөн яуҙар сабып, бөтә Рәсәйҙе дер һелкетеп торған халыҡтың иҡтисади, социаль хәле лә ҡаҡшаған осор ине.

Ташҡа тарих яҙыр хәлгә еткерелгән халыҡтың хәле XX быуат башында ла яҡшы яҡҡа үҙгәрмәне. Илдә барған революцион үҙгәртеп ҡороуҙар, сыҡмаған йәндә өмөт бар тигәндәй, халыҡтың яңы тормошҡа ынтылышын бермә-бер күтәрҙе. Сөнки был үҙгәртеп ҡороуҙар сәйәсәтендә теге йәки был халыҡ яңғыҙ-ярым түгел ине, ә бөтә Рәсәй халҡы тимер ташҡын булып ҡуҙғалғайны. Ябай халыҡ был революци-

он үҙгәртеп ҡороуҙарҙың үҙҙәренә файҙаға икәнен аҡрынлап төшөнә барҙы. Шуға күрә был ваҡиғаның уртаһында ҡайнарға тырышты.

Әммә халыҡ массаларына үҙҙәренең бурыстарын төшөндөргән ялҡынлы һүҙ ҙә кәрәк ине. Әҙәби сығанаҡтар (ҡыҫҡа хикәйәләр, шиғырҙар, таҡмаҡтар, сәхнә әҫәрҙәре) халыҡты берҙәм ҙур көскә туплар сараға әйләнде. Күренекле ғалим Вафа Әхмәҙиев был хаҡта шулай тип яҙа: ”Әҙәбиәттең яңырыуы шулай уҡ ҡулына ғәҙеллек байрағын тотоп, социаль һәм милли иҙеүҙән ҡотолоу юлдарын эҙләүсе, азатлыҡ һәм халыҡ бәхете өсөн көрәштә йәнен-тәнен аямаған яңы типтағы геройҙың майҙанға сығыуында ла күренде. М.Ғафури, Д.Юлтый, Ш.Бабич поэзияһының лирик геройҙары үҙҙәрендә тап бына шул яңы типтағы геройҙың ынтылыштарын кәүҙәләндерҙе”. Шулай уҡ автор был осорҙа, йәғни XX быуат башында, әҙәбиәттә башҡорт ерҙәренең колонизацияланыуына ҡаршы көрәш төп мәсьәләләрҙең береһе булып, аграр мәсьәләнең мәғрифәтселек һәм дөйөм демократик азатлыҡ хәрәкәте менән тығыҙ бәйләнештә күтәрелеүен дә күҙ уңынан ситтә ҡалдырманы. Автор был хәлде башҡорт ысынбарлығынан үҫеп сыҡҡан оригиналь бер күренеш тип баһалай. Мәҫәлән, ”Башҡорт хәлдәре” (С.Яҡшығолов, Д.Юлтый), ”Башҡорт ағаларыма хитап” (М.Татлыбаев, С.Яҡшығолов), ”Башҡорт ҡыҙына” (С.Яҡшығолов), ”Башҡорт ҡатыны” (Ф.Туйкин) әҫәрҙәре ”башҡортлоҡ”то данларға тырыштылар. Шул уҡ ваҡытта Риза Фәхретдинов, Закир Һаҙый, Мәжит Ғафури үҙҙәренең әҫәрҙәрендә татарҙар өсөн дә, башҡорттар өсөн дә әһәмиәтле булған уртаҡ проблемаларҙы күтәреп сыҡтылар. Алдынғы ҡарашлы татар яҙыусылары — Ғабдулла Туҡай, Ғәлимйән Ибраһимов, Мирхәйҙәр Фәйзи башҡорт халҡының эстетик аңын үҫтереүгә булышлыҡ итте, тип һәр яҙыусының күңел донъяһын, рухи булмышын асып һала күренекле ғалим Вафа Әхмәҙиев.

Ҡасандыр көнсығыш әҙәбиәтенән һут алып үҫеп килгән башҡорт әҙәбиәте рус әҙәбиәтенә, уның аша Көнбайыш йоғонтоһона бирелә башлай. Кемдең арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың тигәндәй, революцион үҙгәртеп ҡороуҙар әҙәбиәткә лә үҙенең йоғонтоһон күрһәтмәй ҡалмайҙыр, күрәһең. Был осорҙа әҙәби хәрәкәт тә бер ыңғайҙан ғына бармай. Әйтәйек, М.Ғафури, Д.Юлтый, А.Таһиров, С.Ҡудаш, Ш.Бабич кеүек демократик йүнәлештәге әҙиптәр, крәҫтиәндәр һәм ваҡ буржуаз интеллигенция араһынан сыҡҡанға күрә, тәүҙәрәк шул ҡатламдың йырын йырлап, артабан пролетариат гегемонияһын (йәғни илдәге сәйәси хәлдең айышын) аңлау кимәленә күтәрелә барҙы.

Был осорҙа башҡорт буржуазияһы ла аяҡҡа баҫа. Уларҙың да үҙ яҙыусылары була. Мәҫәлән, С.Яҡшығолов кеүек әҙиптәр һүҙҙе милли мәсьәләләр, ерһеҙләнеү тирәһендә ҡуйыртып, хеҙмәт халҡының иғтибарын синфи көрәштән ситләштерергә тырыштылар. Ошоларға өҫтәп, тағы ла дини-реакцион һәм феодаль-патриархаль ағымдарҙың да үҙ йүнәлешенән баш тартырға теләмәүҙәрен Вафа Әхмәҙиев фактик материал нигеҙендә бик асыҡ сағылдырған. Әйтәйек, М.Ғафуриҙың ”Юҡтырһың да, алла...” шиғыры донъя күргәс, ”Дин вә мәғишәт” журналы Диниә назараты әһелдәре менән берлектә Ғафуриға ҡаршы ҙур кампания ойоштороп, шағирҙы хурларға тырыштылар. Әҙәбиәттә революци-

он-демократик ағым менән дини-реакцион ағым бик ҡаты бәрелешә. Был хәл милли әҙәбиәттең үҫешенә аяҡ салыу тип баһалана.

Әҙәбиәт тарихын барлағанда Ф.Сөләймәновтың да ижадын ситләп үтеп булмай. Уның әҫәрҙәрендә башҡорт халҡының үткән патриархаль тормошо идеаллаштырыла, шуның менән бергә халыҡтың иғтибарын көнүҙәк проблемаларҙан ситкә йәлеп итергә тырышыла.

Тимәк, XX быуат башы әҙәбиәте — ил халҡы ни күрһә, ил сәйәсәте ниндәй юлдан ыҙан ярһа, шуның барыһын да үҙ иҥендә, жанр формаларында, төрҙәрендә татып үҫкән әҙәбиәт. Был хаҡта күренекле ғалим, филология фәндәре кандидаты, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре Вафа Әхмәҙиев шундай һығымта яһай: ”...Әҙәбиәттә 1905—1907 йылдарҙа формалаша башлаған критик реализм методы унынсы йылдарҙың баштарынан алып реакцион романтизм һәм декадентлыҡ күренештәре менән киҫкен көрәштә, прогрессив романтизм менән ҡулға-ҡул тотоноп үҫеш алды һәм империалистик һуғыш, Февраль революцияһы осорҙарында М.Ғафури, Д.Юлтый, Ш.Бабич ижадтарында үҙаллы метод булараҡ шаҡтай нығынды. Февраль революцияһынан һуң М.Ғафуриҙың, Ш.Фидаиҙың айырым әҫәрҙәрендә тыуасаҡ социалистик реализм әҙәбиәтенең тәүге саҡҡылары балҡыны”.

XX быуатта шәхес культы һәм дин культы булды. Шул сәбәпле, мәҫәлән, Мәжит Ғафуриҙың ”Ҡара йөҙҙәр” повесын мәктәп дәреслектәренә ҡайтанан индерергә кәрәк. Был бер минең генә фекер түгел, уҡытыусылар араһында ишеткәнемде яҙам.

Вафа Әхмәҙиев — үҙенсәлекле ғалим. Әҙәбиәт тарихына уның үҙенсә ҡарашы булды. Тикшеренеүҙәренең йөкмәткеһе тәрән мәғәнәле. Фактик материалға таянып, ентекле анализ яһай. Кәрәккән-кәрәкмәгәнгә һүҙ сурытмай. Буш һүҙ — юҡ һүҙ икәнен ул яҡшы аңланы. Фәнни эҙләнеүҙәрендә ”һыу ҡушыуҙар” юҡ. Фекер йөрөтөү стиле аныҡ, теүәл булды, ул факттан был фактҡа ташланыуҙар күҙәтелмәй. Иң мөһиме: Вафа Әхмәҙиевтың хеҙмәттәренән мәктәптә үткәрелгән дәрестәр өсөн йәнеңә теләгән материалды һайлап алып була. Тимәк, ғалимдың фәнни тикшеренеүҙәре мәктәп йәшендәге уҡыусыларға ла яҡын һәм аңлайышлы.

Остаз күргән хат таныр, тип мин юҡҡа әйтмәнем. Вафа Әхмәҙиев ҙур фән даирәһендә, академик Ғайса Хөсәйеновтың фән мәктәбендә тәрбиәләнгән, ҙур ғалим булып формалашҡан. Был данлыҡлы мәктәптә Ким Әхмәтйәнов, Әнүр Вахитов, Суфиян Сафуанов, Рауил Бикбаев кеүек арҙаҡлы ғалимдар үҙҙәренең ғилми тикшеренеү стилдәрен үҫтергәндәр. Арҙаҡлылар мөхитендә арҙаҡлылар үҫеп, үҙ концепциялары, методологияларын төҙөйҙәр. Вафа Әхмәҙиев та ана шундай арҙаҡлы ғалимдарыбыҙҙың береһе ине. XX быуат башы әҙәбиәте төрлө ижад йүнәлешен тотҡан әҙиптәрҙең ҡатмарлы эшмәкәрлегенән хасил булды. Ул осорҙоң тарихи ваҡиғалары ла шул заман яҙыусыларының ижадына үҙ шауҡымын өҫтәй торҙо. Вафа Әхмәҙиев ҡатмарлы осорҙоң әҙәби ағымдарын, үҫешен төҙөк бер системаға һалып, юғары фәнни кимәлдә өйрәнә алған. Остаз күргән хат таныр, тип әйтеүем дә Вафаның ижад ҡомарының балҡышын дәлилләйҙер.

## XX быуат башы — әҙәбиәттең йөҙөк ҡашы

XX быуат башында, критик реализм методы формалаша һәм нығына барыу мәлендә, башҡорт шиғриәте ниндәйерәк ыҙандан юл яра алды икән? Был һорауға ла күренекле ғалим үҙенең аныҡ ҡараштарын әйтеп үтә. Шул осорҙағы шиғриәт донъяһының асылына үтеп инергә тырыша. Донъяуи хәл-ваҡиғаларҙың ҡатмарлы осоронда, әләмдәр алмашынып, ғәмәлдәр ҡан көҫәр заманда, халыҡтың күҙе асылып, күңеле, хыялы азатлыҡ тип ярһыған, талпынған ваҡытта, заңдар менән заман үҙ-ара тартышҡан мәлдә, әҙәбиәттең башҡа жанрҙарына ҡарағанда, поэзия өҫтөнлөк ала. Сөнки уның шәхес күңеленә тәьҫир итеү көсө бермә-бер юғары була. Вафа Әхмәҙиев шиғриәттең яңы осорҙа үҫеш һәм яңы формала үҙгәреш методологияһына ла байҡау яһай.

XX быуат башында башҡорт поэзияһының үҫеш сығанаҡтарына нимәләрҙе индерергә мөмкин? Һәр жанр үҙенең артабанғы үҫешендә традицион ҡалыптарҙы үҙһенеп бармай торғандыр. Авторҙың күҙәтеүенсә, халыҡ ижадын, уның милли традицияларын, Шәреҡ поэзияһын, рус һәм башҡа туғандаш халыҡтарҙың поэтик ҡаҙаныштарын ижади үҙләштереп, XX быуат башында башҡорт поэзияһы, М.Ғафури, Д.Юлтый, Ш.Бабич ижадтары йөҙөндә, һүҙ сәнғәте булараҡ өр-яңы юғарылыҡҡа күтәрелә. Мәҫәлән, Мәжит Ғафури, алға киткән милләттәрҙән үрнәк алып, фән һәм мәғрифәткә тотонорға саҡыра икән, уның сәбәптәре лә барҙыр бит? Бына ошо һорауҙың да мәғәнәһен, йөкмәткеһен асып биреүгә өлгәшә алған Вафа Әхмәҙиев үҙенең ғилми тикшеренеүҙәрендә.

Башҡортостандың тәүге халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың XX быуат башындағы ижады боролмалы юлдар, һикәлтәле үрҙәр аша үҫеш ала. Ул боролмаларҙы, һикәлтәләрҙе заманға ла япһарырға мөмкин, шағирҙың донъяуи ҡарашына ла ҡайтарып ҡалдырырға булалыр. XX быуат башы шиғриәтенең тәүге бураҙналары бик тигеҙҙән, туранан булмаһа ла, ул осор әҙиптәре тәүге нәфис һүҙ мәктәбен барлыҡҡа килтерҙе. Ул мәктәптә тәүге традициялар, тәүге ысулдар, тәүге талпыныу-ынтылыуҙар, тәүге революцион-романтик ҡараштар үҫеш алды. Әйтәйек, Мәжит Ғафуриҙың ”Юҡтырһың да, алла...”, ”Беренсе оҙон юл донъяла — Себер тимер юлы” шиғырҙары араһындағы үҫеште йылдар, дәүер менән генә билдәләп буламы? Мәҫәлән, 1905 йылда яҙылған шиғырҙарында Мәжит Ғафури ижады революцион-романтик төҫтә балҡый. Түбәндәге юлдарға иғтибар итәйек:

Ватылды хазинаның йоҙаҡтары,  
Өҙөлдө аяҡтағы тоҙаҡтары.  
Хазинаның эсенә күҙҙе һалһаң,  
Күҙгә төшә һәр милләттең үҙ хаҡтары.

Был шиғыр юлдары үҙе үк ул замандағы шағирҙың эске, күңел донъяһын асып бирә. Мәжит Ғафури 1905 йылдан һуң халыҡтың бөйөк ҡуҙғалышына, илдә барған революцион үҙгәрештәргә ҡыуана, иҙелгән милләттәрҙең донъяуи хәл-ваҡиғаларға ҡарата күҙҙәре асылыуына, ҡоллоҡ

бығауҙарының өҙөлөүенә, азатлыҡ өсөн көрәш менән яныусы һәр милләттең уртаҡ шатлығына, бөйөк хазиналай булған ерҙең ярлылар, халыҡ ҡарамағына күсәсәгенә ышана.

Күренекле ғалим Вафа Әхмәҙиев XX быуат башында Мәжит Ғафуриҙың ижадында төп ике һыҙатты айырып күрһәтә: ”...беренсенән, — ти ул, — донъяға ҡарашының әлеге мәғрифәтселек идеялары кимәленән күтәрелеп етә алмауы менән бәйле булһа, икенсенән, был 17 октябрь манифесына һәм I Думаға ҙур ышаныс менән ҡарауынан килә ине”.

Вафа Әхмәҙиев XX быуат башы шиғриәтендә исемдәре бөгөнгө уҡыусыларға билдәле булмаған байтаҡ шағирҙарҙың әҫәрҙәренә етди анализ яһаған. Яңғыҙ шағирҙы бөйөк тип атап булмай. Был — аксиома. Уның бөйөклөгөн асып бирерҙәй кимәлдә ижад иткән байтаҡ һүҙ оҫталары булырға тейеш. Ижад менән ижадты сағыштырыуҙар аша кимәлдәр билдәләнә. Әйтәйек, әгәр XX быуат башында янып-ярһып нәфис һүҙ сәхрәһендә талпынған Сафиулла Рәхмәтуллин, Шафиҡ Әминев-Тамъяни, Зыяитдин Шипаев, Ғатаулла Ғәлиев, Нурмөхәммәт Йомрани, Сабирйән Мөхәмәтҡолов, Ғиззетдин Иҫәнбирҙин, Ямалетдин Йомаев, Хәбибулла Ғәбитов, Ғәлә Хоҙаяров, Вәсим Солтанов, Шәйхулла Тулвинский, Кәшфи Ҡәрипов, Фазыл Туйкин, Сафуан Яҡшығолов һәм башҡа бик күптәрҙең ижады булмаһа, Мәжит Ғафури, Шәйехзада Бабич һәм Дауыт Юлтый шиғриәтенең моңон, халыҡҡа тәьҫир итер көсөн, поэтик асылын аныҡ билдәләй алыр инекме? Фәҡәт сағыштырыуҙар аша ғына нәфис һүҙ оҫталарының шағирлыҡ кимәлдәрен билдәләй алабыҙҙыр.

Күркәм һүҙ сәнғәте башҡа халыҡтарҙың шиғриәтенән дә һут, ут, көс алалыр. Шул осорҙағы башҡорт милли поэзияһының сығанаҡтары байтаҡ ҡына. Бына улар: башҡорт халҡының йыр поэзияһы, көнсығыш классик әҙәбиәте үрнәктәре, Ғ.Туҡай, А.Пушкин, М.Лермонтов, И.Крылов һәм башҡа бик күп нәфис һүҙ оҫталарының өлгөләре. Бына ошо сығанаҡтар нигеҙендә башҡорт шиғриәте һүҙ сәнғәте булараҡ яңырыу дәүерен кисерә. Вафа Әхмәҙиевтың билдәләүенсә, поэзия, өгөтләү, саҡырыу, өндәү функцияһын икенсе планға ҡалдырып, шәхестең рухи тормошондағы нескә кисерештәрҙе сағылдырыу аша уҡыусыға эмоциональ яҡтан тәьҫир итеүсе һүҙ сәнғәте булараҡ майҙанға сыға, шиғырҙың ритмик интонацияһы үҙгәрә, риторик назымлауҙы образлы һүрәтләү, картиналылыҡ ҡыҫырыҡлап сығара башланы.

Күренекле ғалим Вафа Әхмәҙиевтың ғилми ижад ҡомары камил асылған сағы ине. Шуға ла ул әҙәбиәт проблемаларының ҡайһыһына тотонһа ла ырамлы, етди, юғары фәнни кимәлдә тикшеренеүҙәр алып барҙы. Дөйөм әҙәбиәт ғилеменең үҫеше тураһындамы, шиғриәт йәки проза жанрҙарының формалашыуы хаҡында булһынмы — һәр йүнәлештә йөктө бер кимәлдә тартты. Уйланыуҙар, төпсөнөүҙәр, эҙләнеүҙәр, китапханаларҙа, архивтарҙа соҡсоноуҙар уның төп ижад итеү рәүеше ине.

Башҡорт прозаһының тәүге аҙымдарын да Вафа Әхмәҙиев бик ентекләп өйрәнгән. Һәр жанрҙың үҫә, формалаша, һүҙ сәнғәтенең тамам ныҡынған бер төрө була барыуы тарихи осорҙар, шул замандағы хәлваҡиғалар менән тығыҙ бәйләнештә тороуы һәр ғалимға, әҙәбиәт белгестәренә мәғлүмдер. Замандың үҙенә күрә актуаль проблемалары

жанрҙың тәбиғәтенә үҙ йүнәлешен, үҙ сағылышын бирмәй ҡалмайҙыр. XX быуат башы прозаһында ла шул һыҙаттарҙы, башҡорт милли прозаһының башланғыс этаптарын, халыҡтың аң-белемгә, мәғрифәткә ынтылышын күрергә мөмкин. Заманың ниндәй — әҙәбиәтең дә шундай тигән методологик принципты инҡар итеп тә булмайҙыр.

Вафа Әхмәҙиев XX быуат башы прозаһын тикшергән саҡта ла шул осорҙа сәсмә әҫәр ижад итеүселәрҙең байтаҡ исемдәрен телгә ала, уларҙың әҫәрҙәренә ҡыҫҡаса анализ биреп китә. Ғилми әйләнешкә, ғилми хеҙмәттең төп нигеҙенә индереп ебәргән күп кенә яҙыусылар, мәҫәлән, Ғәли Рафиҡи, Әхнәф Таңғатаров, Фәйзи Вәлиев, Әхкәметдин Иҫәнбирҙин, Кәбир Туйкин, Вәсим Солтанов, Мөхәмәтһаҙый Сәғҙи, Закир Һаҙый һәм башҡа әҙиптәр, уларҙың ижады бөгөнгө уҡыусыға таныш түгел. Әммә улар ҙа, Мәжит Ғафури, Афзал Таһиров, Ризаитдин Фәхретдиновтар һымаҡ, әҙәбиәтебеҙҙең тарихи үҫешендә үҙҙәренең яҡты эҙҙәрен ҡалдырыусы яҙыусылар икәненә инанабыҙ. Проза баҫҡыстарында, әҙәби методтар сайҡалышында уларҙың да үҙ ҡараштары, фараздары, концепциялары булды.

Ғалим Вафа Әхмәҙиевтың күҙәтеүенсә, XX быуат башы прозаһы халыҡ тормошоноң төрлө яҡтарына үтеп инергә мөмкинлек бирҙе. Сюжет, композиция ҡоролошонда һиҙелерлек ҡаҙаныштар булды. Мәғрифәтселек дәүерендә сюжет ҡороуҙа Көнсығыш әҙәбиәтенә хас шартлылыҡ өҫтөнлөк итһә, унынсы йылдарҙа, реализмдың нығына барыуы менән бергә, сюжет һәм композицияла тормошҡа яҡынлыҡ көсәйҙе, халыҡ ижады традицияларына, халыҡтың йәнле һөйләшенә иғтибарҙың арта барыуы әҙәби телде ғәрәп-фарсы һүҙҙәренән арындырыуға, телдең халыҡсанлашыуына булышлыҡ итте, милли прозаның ышаныслы аҙымдары яһалды.

XX быуат башы — әҙәбиәттең йөҙөк ҡашы тигәйнем. Вафа Әхмәҙиев был осорҙағы рухи хазиналарыбыҙҙың төрлө сығанаҡтарын, йүнәлештәрен, художестволы методтарының сағылышын йөҙөк ҡашына тиң итеп балҡыта алған. Этник мәҙәниәтебеҙҙең жанр тармаҡтарын айырым-асыҡ төҫтәр менән күрһәтә алған. Фәнни стиле лә төрлө теоретик төшөнсәләр менән ҡатмарландырылмай. Әҙәби-теоретик терминдар менән сыбарланған йөкмәткеһеҙ яҙмалар фәннилеккә дәғүә итә алмауын автор яҡшы аңлап эш иткән, күрәһең. Ғалимдың ҡараштары анығ миҫалдар менән нығытыла килә. Хеҙмәттең фәннилеге лә, тәрән йөкмәткеһе лә, мәғәнәһе һәм асылы ла шундалыр, минеңсә.

Олуғ ғалим Вафа Әхмәҙиев XX быуат башы әҙәбиәтенең һәм, ғөмүмән, бөгөнгө әҙәбиәтебеҙҙең йөҙөк ҡашы тип баһаланырҙай Шәйехзада Бабичты, Мәжит Ғафуриҙы, Дауыт Юлтыйҙы, Афзал Таһировты шул осор рухи хазиналарыбыҙ көмбәҙендә яҡты йондоҙҙар итеп балҡыта. Ана шул әҙиптәрҙең үҫеш баҫҡыстарында тиҫтәләгән башҡа ҡәләм оҫталарының ижады ла ҙур роль уйнағанын автор күҙ уңынан ысҡындырмай. Ижадтың ҙурлығын танып өсөн башҡа ижадсыларҙың рухи балҡыштары ла кәрәк. Әҙәбиәттә һәр ижадсы мөһим роль уйнай. Бөйөклөккә илтеүсе юлдың да үҙ терәү-таяныстары бар. Сығанаҡтарҙы сағыштырып өйрәнеү арҡаһында Бабичты Бабич тип, Ғафуриҙы Ғафури, Юлтыйҙы Юлтый, Таһировты Таһиров тип таный алабыҙ. Поэзиямы, прозамы, драматургия булһынмы — барыһы ла уҡыусыларҙың донъяға

ҡарашын формалаштырыусы әҙәби саралар. XX быуат башы әҙәбиәтенең ул саралары ҙур ғалим, әҙип Вафа Әхмәҙиев тарафынан бик ентекләп өйрәнелгән. Уның монографик хеҙмәте, әҙәбиәт белеме буйынса башҡа тәрән йөкмәткеле мәҡәләләре юғары уҡыу йорттарының уҡытыусылары һәм студенттары өсөн иң кәрәкле һәм төп уҡыу ҡулланмаларының береһе булырға тейештер, минеңсә.

Ғалим үҙенең бер шиғырында шулай тип яҙғайны:

> Һис китмәҫкә килгән кеүекмен мин,
> Ҡайырылмаһын ине шул ҡанат...
> Кемгә генә мәғлүм түгел һуң ул —
> Йәшәүҙәре ерҙә бер ҡабат...

Заманында Вафа Әхмәҙиев, бәлки, киң йәмәғәтселектең баһаһын, иғтибарын күрә лә алмағандыр. Булмышы, тәбиғәте менән үтә тура һүҙле затты кем күтәреп, кем маҡтаһын инде. Шуға күрә уның, йәғни филология фәндәре кандидатының (ҡаты талапсанлыҡ хөкөм һөргән ул замандың фән кандидаты бөгөнгө көндә фән докторлығы дәрәжәһенә диссертация яҡлаған ғалимдың булмышынан күпкә юғарылыр), СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының өлкән ғилми хеҙмәткәренең исемле премиялары ла, атҡаҙанған тигән маҡтаулы хөрмәт-маҙары ла булманы. Әммә ул — фәндә лә, әҙәбиәттә лә үҙенең ныҡлы, абруйлы урынын яулаған шәхес.

Тыуыуына 70 йыл тулыу уңайы менән уның исеменә арнап фәнни-практик конференция, хәтер кисәләре, әҙәби уҡыуҙар ойошторолһа, уның рухы күтәрелер, үҙен күрһәтер ине.

## Күңелендә ярһый эйәрле ат




Шағирҙың күңеле яҡты хисле, моңло хисле. Ул үҙенең тарихына, үткәненә, халҡының йәшәү рәүешендәге ҡанлы йәшендәргә битараф түгел. "Кеше күңеле — ҡара урман", ти халыҡ аҡылы. Әммә ниндәй генә булһа ла, күңелендә эйәрле ат ярһымаһа, быуаттарҙан елеп үткән аҡ аманат-хат ятмаһа, ирмен тигән ирҙең бәҫе төшөр ине. Бигерәк тә шағирҙың.

Быуаттар аманатын был донъяға ла, йәш быуынға ла түкмәй-сәсмәй тапшырыу кәрәк. Әгәр күңелең бикле, күҙең йоҙаҡлы, ҡул-аяғың тоҙаҡлы булһа, быуындар сылбыры шартлап өҙөлөп китмәҫме, ҡанбабаларыбыҙҙың аманаты замана елғыуарҙарында йомолоп ҡалмаҫмы? Шул аманаттың мәғәнәһен шағир бына нисек төшөндөрә:

Эйәрле-йүгәнле атым —
Быуындар аманаты,
Халҡымдың керһеҙ намыҫы,
Ҡайырылмаҫ ҡанаты.
Эйәрле ат — аҡ аманат —
Ут-һыуҙарҙы кискән ул;
Бер ат булып, бер хат булып,
Көңелдәргә күскән ул...

Ни өсөн шағир аманатты халҡымдың керһеҙ намыҫына тиң ҡуя? Сөнки аманат та, халҡымдың намыҫы ла азатлыҡ өсөн, тимәк, ғәҙеллек өсөн көрәш ҡанында йыуылған. Күңелендә эйәрле ат — халҡың даны менән генә ғорурланыу түгел, шул халҡың тип аталған ҡәҙерле, ҡаһарман зат өсөн йәнең аямай көрәшкә әҙер тороу ҙа ул. Аманатҡа тоғро ҡалып, халҡыңдың керһеҙ намыҫын һаҡларға, яҡларға әҙер тороу ҙа — ирмен тигән ир кешенең изге бурысы.

Күренекле шағир Вафа Әхмәҙиев үҙенең был шиғырын түбәндәгесә тамамлай:

Күңелемдә — эйәрле ат:
Айбарланып киләмен;
Быуаттарҙың йөгөн тартып,
Заман менән еләмен.

Нимә һуң ул быуаттар йөгө? Юл ыңғайы ана шул һорауға ла яуап биреү кәрәктер. Быуаттар йөгөнә шағир ҙур мәғәнә һалған. Унда азатлыҡ өсөн барған көрәш даны ла, яугирҙарҙың изге ҡаны ла, ҡанбабаларҙың киләсәк быуынға аманат-хаты ла, ҡаһармандар тарихы ла, рус хакимдары менән төҙөлгән килешеүҙәрҙең үтәлмәгән буш ҡағыҙ киҫәктәренә әйләнеүе лә, күкрәп үҫер Башҡортостандың киләсәге өсөн сәм дә, ғәм дә бар. Быуаттар йөгөндә, бәлки, заманында йәлләдтәр тарафынан киҫелгән башҡорттарҙың телдәре лә барҙыр. Шул телдәрҙе бөгөнгө көндә киҫелгән телдәргә ялғап булһасы. Күп кенә башҡорт балалары һаман туған телендә аралаша алмай. Телдәре русса асылған уҡыусылар үҙҙәренең туған телен дәүләт теле сифатында ғына өйрәнә. Ә дәүләт теле сәғәттәрен башҡортса мәғлүмәте булмаған уҡытыусылар алып бара. Бына шунан килеп сыға ла инде үҙ туған телен, үҙ туған телмәрен белмәүсе зат-ҡәүемдәр. Был да үҙенә күрә яңы быуат йөгө. Ул йөктө артабан кем тартыр? Быуаттарҙың йөгөн тартып, заман еле менән ярышып елгән шағирҙар бармы икән, ҡалдымы икән?..

Ҙур ҡәләм оҫтаһы Вафа Әхмәҙиев был тормошта ҡырҡ алты йыл йәшәү ғүмерендә ҡалын-ҡалын китаптарҙан торған ҡабарынҡы ижад-фәлсәфәләр ҡалдырманы. Әммә уның ыҡсым ғына китаптарындағы рухи мираҫы тәрән фекере, аныҡ уйланылған образлы һүҙе, оҫта сағыштырыуҙары, киң мәғәнәле күркәм телмәр өлгөләре менән хәтерҙә уйылып ҡала. Ҡайһы бер шағирҙар, ”ҡырҡлап китабым баҫылып сыҡты” тип, үҙҙәренең данын, шөһрәтен арттырып ебәрергә тырыша. Бындай ”уңыштар” Вафаға насип булманы

инде, ҡалайтаһың. Ғалимлыҡ ҡеүәһе, шағирлыҡ таланты тамам асылған саҡта ғына был донъяны ҡалдырып китеп барҙы. Яҙмыштан ялтанып булмайҙыр инде, күрәһең. Уның бер шиғырында шундай юлдар бар:

Заманалар аҡҡан һыу икән,
Йә шым ғына, йәки шылтырап,
Берәү шунда йәшәй йәшен булып,
Берәү донъя ҡыуа ҡалтырап.

Вафа Әхмәҙиев аҡҡан һыу кеүек кенә заманаларҙа донъя ҡыуып маташманы, кешелек һәм кешелеклелек намыҫына тап төшөрмәне, йәшен булып йәшнәп йәшәй бирҙе, халыҡ аңлаған образдар, һүрәтләү саралары менән шиғырҙарын яҙҙы. Ул нескә күңелле лирик шағир ине, тыуған төйәгенең һәр күренешенән йәм таба белде. Ана шул йәмде, биҙәкте, матурлыҡты үҙенең шиғырҙарына, йырҙарына, саф моң итеп һала барҙы. Шуға ла уның әҫәрҙәре моңло. Вафаның ауыҙ күтәреп йырлап, шиғыр һөйләп йөрөгәнен хәтерләмәйем, тик әҫәрҙәре ифрат моңло булды. Ҙур шәхес булараҡ, Вафа һис тә бойоҡ заттан түгел ине. Бәлки, эстән һыҙланһа ла, тышҡа сығарып бармағандыр һағыш томандарын. Күңелендәге эйәрле ат шиғриәт толпары нәҫеленән булғандыр, бәлки. Бер ҡанаты — әҙәбиәт ғилеме, икенсеһе — шиғриәт тип аталған күркәм һүҙ сәхрәһенә әйҙәгәндер. Шуға ла тыуған төйәгенең мөһабәт күкһел тауҙарылай күңеле бойоғорға уйлап та ҡарамағандыр.

## Күкрәгемдә күк күкрәне...

Шағирҙың көсө, ҡөҙрәте нимәлә? Был һорау юҡтан барлыҡҡа килмәне. Образлы һүҙендә, һүрәтләү сараларында, шиғырҙың төп фекерендә, поэтикаһында тип әйтәбеҙ. Әммә күренекле ғалим һәм шағир Вафа Әхмәҙиев икенсе төрлөрәк фараз итә. Мәҫәлән, уның ”Уҡыусыға бер һүҙ” тигән шиғырында шундай фекергә юлығабыҙ:

Шағирға бит шиғыр — тойғо менән
Тау ҡәҙәре боҙҙар иретеү;
Төндәрҙе — көн, ҡайғыларҙы шатлыҡ,
Үлеләрҙе ҡабат терелтеү;
Ут менән һыу, нәфрәт менән һөйөү
Ғазаптарын бергә йөрөтөү.

Күңелендә эйәрле ат яткан, күңеле менән йондоҙҙарға һикергән шағирҙың был фаразы менән килешмәү мөмкин түгел. Автор был һүҙҙәре менән шиғриәттең методологияһын, шағир тигән заттың төп концепцияһын, тәғәйенләнешен асып биргән. Әҙәбиәт донъяһында шағирҙарыбыҙ бик күп: ҡойоп ҡуйып рифмалайҙар, килештереп һамаҡлайҙар, арбаусылары менән арнаусылары ла бар хатта. Әммә туң күңелдәрҙе иретерлек, ҡайғыларҙы таратырлыҡ, битараф йәндәргә рухи көс, моңһоҙҙарға моң бирерлек, хис-тойғо буранын уйнатырлыҡ шиғырҙар аҙ яҙыла. Вафа

Әхмәҙиевтың әле килтерелгән һүҙҙәре уҡыусыға түгел, бөгөнгө шағирға, шиғриәткә өндәшкәндәй. Шағир булараҡ та, ғалим булараҡ та Вафа үҙ ижадына ла, ҡәләмдәштәренең шиғриәтенә лә талапсан ине. Шуға ла ул халыҡҡа яҡын телдә, халыҡҡа яҡын моңда камил әҫәрҙәр ижад итте.

Нимә ул шиғыр? Бәхәсләшмәй торайыҡ. Вафаны тыңлап ҡарайыҡ әле:

Шиғыр — һүҙҙән ҡойған һәйкәл,
Данлағанда батырҙы;
Шиғыр — асыу ҡатыш ҡәһәр,
Үҙ итмәй ул бахырҙы.

Шиғыр — көйрәп ҡыҙған нәфрәт,
Йыртыусы яуыз битен;
Шиғыр — оран, яу килгәндә,
Һытыусы дошман үтен...

Күркәм һүҙ сәнғәтендә шиғыр жанрының тәғәйенләнешен, халыҡтың йәшәү рәүешендә поэтик һүҙҙең бәҫен, ҡәҙерен, мәғәнәһен бына нисек асып биргән ул. Батырҙарыбыҙҙы данлап, исмаһам, шиғырҙан һәйкәл ҡойҙоҡмо? Ил тигәндең кеме юҡ? Бар фәҡире, бар байы. Бөлә барған ил байлығын, фәҡирлеккә дусар халыҡ байлығын үҙенеке иткән бөгөнгө түрәләргә, замана байҙарына, асыу ҡатыш ҡәһәрҙе белдереп, берәй сәсән шиғыр яҙҙымы? Урмандарыбыҙ, ерҙәребеҙ, бөтөн байлыҡтарыбыҙ сит бауырҙарға һатылып бөтөп бара. Ана шул енәйәтселеккә ҡаршы берәйһе, көйрәп ҡыҙған нәфрәтен белдереп, халыҡҡа оран һалып, шиғыр яҙҙымы?

Шағирҙың үҙенсәлекле моңон, стилен, һүрәтләү сараларын аныҡ күҙ алдына килтерер өсөн бер шиғырын тулы килеш ҡарап үтәйек. Ул әҫәр ”Мин йырларға тейеш...” тип атала.

Мин йырларға тейеш гүзәл бер йыр,
Ятлап алһын уны ғашиҡтар,
Сыңлап китһен былбыл тауыштары,
Көнләшһендәр моңло аҡҡоштар...

Мин йырларға тейеш аҫыл бер йыр:
Томраларҙа болот булырлыҡ,
Өмөтһөҙҙөң һыныҡ күңеленә
Шифалы һут булып тамырлыҡ.

Мин йырларға тейеш дәртле бер йыр:
Моңһоуҙарҙың йөҙөн асырлыҡ,
Яманһыулап яңғыҙ ҡалғандарға,
Мин — дуҫың, тип килеп баҫырлыҡ.

Мин йырларға тейеш хәтәр бер йыр:
Ил дошманын йыға һуғырлыҡ,

Яуҙа яңғыҙ ҡалған ҡаһарманға
Дау ҡайтарыр оран булырлыҡ.

Мин йырларға тейеш изге бер йыр:
Тере шишмә булып ағырлыҡ,
Килер быуындарға бөгөнгөмдөң
Йәмен, тәмен, дәртен, ярһыуҙарын,
Аманатын алып барырлыҡ.

Ысынлап та, шағирлыҡ ҡайҙан башлана? Вафа Әхмәҙиев өсөн был төшөнсә Егән һыуҙарын эскәндә, торналар тояҡ биргәндә, ҡанат биргәндә, ана шул торналар биргән тояҡтары менән таңдарын ысыҡ кискәндә башланған булғандыр. Йәйге йәшенле ямғырҙа етеҙ Егәненең ҡолондай уйнаҡлап сапҡанын күргәндә, күңелендә, бәлки, моң ҡуҙғалғандыр. Донъя картинаһын фәҡәт үҙенсә (башҡаларса түгел!) танып белеүҙән дә шағирлыҡ башланалыр. Мәҫәлән, Вафа үҙенең бер шиғырында: "Белегеҙ һеҙ илгә ҡояш нуры һеҙҙең күҙҙәр аша үткәнен", — тип әйтә икән, бында ла үҙенсәлекле танып белеүгә юлығабыҙ. Тимәк, шағирлыҡ ул ҡәләм оҫтаһының үҙенсәлекле "үҙенсәләре"нән башлана. Ана шул "үҙенсәләр" ни тиклем күберәк булһа, шағирҙың абруйы ла, ҡәләменең үткерлеге лә, әйтәһе һүҙенең ҡиммәте лә, фекеренең тәрәнлеге лә, мәғәнә киңлеге лә күтәрелә бара. Вафа Әхмәҙиевтың әҫәрҙәрендә ундай "үҙенсәләр" етерлек. Шуға ла уның шиғырҙары халыҡсан, халыҡҡа яҡын телмәр үрнәктәре менән ижад ителгән. Уның шиғырҙарын халыҡ яратып уҡый икән, бының менән шағир бәхетле.

## Шағирҙың тәржемәләре

Башҡа телдәге ижадты үҙ телеңә, уның шиғри ҡанундарына тура килтереп тәржемә итеү өр-яңы шиғыр яҙыуҙан да ауырыраҡтыр, минеңсә. Ауырыраҡ тинем, сөнки тәржемәсе сит әҫәрҙе үҙебеҙҙең телмәр ҡалыптарына яйлаштырырға тырыша. Тәржемә барышында төп сығанаҡтағы образлылыҡ, һүрәтләү саралары, кинәйәлек, этник мәҙәниәт биҙәктәре тулыһынса һаҡланып ҡалырға тейеш. Тәржемәсе шағир ни тиклем оҫта булһа, уның тәржемәләре лә үҙе яҙған әҫәр һымаҡ шыма килеп сыға. Вафа Әхмәҙиев тәржемә өлкәһендә лә һынатманы. Бының өсөн уның башҡортсаға ауҙарылған әҫәрҙәрен күңелгә һалып, тойоп уҡырға ғына кәрәк. Мәҫәлән, Сергей Есенин, Ҡайсын Кулиев, Генрих Гейне, Аманжол Шәмкенов, Петро Осадчук, Виктор Кочевскийҙарҙың ҡайһы бер әҫәрҙәрен Вафа Исхаҡ улы башҡорт шиғриәтенең поэтикаһына ҡойоп ҡуйған кеүек тәржемәләгән.

Вафа Әхмәҙиевтың өлгө тәржемәһе булып Михаил Воловиктың "Ерәнсә сәсән" тигән хикәйәте һаналалыр. Ҡәләм оҫталарының барыһы ла тип әйтерлек тәржемәгә битараф түгел. Әммә тәржемә сәхрәһендә Вафаны мин атаҡлы шағир итеп кенә түгел, ҡойоп ҡуйған сәсән һынында ла күрәм. Әгәр ошо "Ерәнсә сәсәндең ҡырҡ мәҙәге"нән бәләкәй генә бер өҙөк килтермәһәм, Вафа сәсәндең рухы рәнйер төҫлө:

Ҡыш һалҡынын йәй иткән,
Селләлә күңел иреткән,
Ир-егеткә дәрт биреп,
Иленә тоғро ир иткән
Йыр булмайса, ни булһын, әү,
Сәсән булмай, кем булһын!
Йәнен атҡан ғашиҡтар
Йәрһеҙ сыҙай алырмы,
Моңайғанда йәр көткән, әү,
Йырһыҙ сыҙай алырмы?

Зауыҡ ҡына түгел ул,
Йыр йырлауы күңелгә:
Кәрәк саҡта йыр — дауыл, әү,
Ғәмһеҙ ятҡан диңгеҙгә!

Бал ҡортондай, тамсылап,
Сәсән йыйыр ил зарын,
Йыйнап әйтер йырында, әү,
Күңелендә ни барын!

Үтеп инһә моң булып,
Йөрәктән сыҡҡан — йөрәккә, әү,
Йөрәктән сыҡҡан — йөрәккә,
Сәсән һүҙе көс булып,
Әйләнер бер терәккә, әү,
Әйләнер бер терәккә!

Изге йыры сәсәндең
Яуызлыҡҡа яу булыр, әү,
Яуызлыҡҡа яу булыр;
Сирләп ятҡан сырхауың да
Аяҡҡа баҫыр, һау булыр, әү,
Аяҡҡа баҫыр, һау булыр!

Вафа Исхаҡ улы Әхмәҙиевҡа ошо йылдың 5 августында 70 йәш тулған булыр ине. Арабыҙҙан киткәндәргә ”булыр ине” тип әйтеүе лә ҡыйын. Ҡыйын, сөнки милли-мәҙәни мөхитебеҙҙән күберәк һәләтлеләр, таланттар китә. Әҙәбиәтебеҙҙең көмбәҙен балҡытырҙай ижадсылар китә тора. Улар менән бергә һәйбәт традициялар ҙа, үҙенсәлекле ҡараштар ҙа, йәндәрҙе тетрәтерҙәй образлы һүҙ ҙә, күңелдәрҙе иретерҙәй моң да, телмәр күркәмлеге лә юҡҡа сыға бара һымаҡ. Үҙенең 46 йәш ғүмерендә Вафа байтаҡ фәнни хеҙмәттәр, монографиялар, шиғырҙар ижад итте. Ана шул ғилем нуры, шиғырҙары ҡабатланмаҫ моң булып, һәйкәл булып, һәр саҡ үҙен хәтерләтеп торор, ана шулай ул беҙҙең арабыҙҙа йәшәйәсәк. Шуға күрә лә уға: ”70 йәшең менән, Вафа уҙаман!” — тип әйтке килә. Фәнгә, ижадҡа хеҙмәт иткән ғалимдың һүҙе, шағирҙың үҙе онотолмай ул.